# Якташ әҙиптәребеҙ

Йырлы-моңло тыуған ер
Яҙыусылар тыуып үҫкән ер,
Иманлы ер ошо бит,
Илһамлы ер ошо бит.
Тарихлы ер ошо бит,
Тамырлы ер ошо бит.
Эй, туғандар, рәхим ит!

# М. Аҡмулла



- Шағир, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла 1831 йылдың 14 декабрендә Миәкә районы Туҡhанбай ауылында тыуа. Мәләүезтамаҡ, Әнәс мәҙрәсәләрендә уҡый. Ауылдарҙа башҡорт һәм ҡаҙаҡ балаларын уҡытып йөрөй. Аң-белемгә әйҙәй. Батша әрмеһендә хеҙмәт итеүҙән баш тартҡан өсөн уны 1867-1871 йылдарға төрмәгә ултырталар. Уның бик күп шиғырҙары үҙе үлгәс кенә баҫылып сыҡты.



# Азат Мағазов



- Азат Шәйехйән улы Мағазов 1926 йылдың 17 декабрендә Миәкә районы Баязит ауылында тыуа. Елдәр урта мәктәбен тамамлай. 1944 йылда штурм авиация полкында немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә ҡатнаша. Ситтән тороп Харьков педагогия институтының тарих факультетын тамамлай. ‶Шоңҡар юлы‶, ‶Һауаларҙа йондоҙ‶, ‶Осоу‶, ‶Хыял күккә саҡыра‶ тигән әҫәрҙәре бар.

# Азат Мағазов





# Фәнис Янышев



- Фәнис Янышев Миәкә районы Ерекле Күл ауылында тыуған. Ҡолтай-Ҡаран башланғыс, Боғҙан урта мәктәптәрендә белем алғас, техникум, институт тамамлай. Совет армияһында хеҙмәт итә. Гәзит редакцияларында, Башҡортостан радиоһында эшләй. Ф. Янышев ете китап авторы.



# Ғариф Ғүмәр




- Ғариф Ғүмәр 1891 йылдың 10 декабрендә Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылында тыуа. Ауыл мәҙәрәсәһен тамамлағас, "Хөсәиниә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Армияға алынып һуғышҡа оҙатыла. Ауылға ҡайтып уҡытыусылыҡ менән шөғөлләнә. Өфөлә республика газеталарында эшләй.

# Марс Әхмәтшин



- М. Әхмәтшин 1948 йылдың 21 февралендә Миәкә районы Сәфәр ауылында тыуған. Совет армияһында ил сигендә хеҙмәт итә. Республика гәзит-журналдарында, радио-телевиденияларында эшләй. Унын "Беҙ осрашырбыҙ, Ринго!", "Юлыма сыҡ, Гөлсирә!", "Рәмзиә!" тигән китаптары бар.

# Факил Мырҙаҡаев



- Факил Мырҙаҡаев Миәкә районының Ҡаран ауылында тыуған. Садовый ҡасабаһында урта мәктәпте тамамлай. Башҡорт Дәүләт университетында белем ала. ‟Октябрь‟, ‟Совет Башҡортостаны‟ гәзите, ‟Башҡортостан ҡыҙы‟ журналы редакцияларында эшләй. Туғыҙ китап авторы.

# Хәкимйән Зарипов



- Хәкимйән Зарипов 1929 йылдың 18 октябрендә Миәкә районы Ҡаран ауылында тыуа. Ҡазан дәүләт университетында уҡый. Өфөнөң Орджоникидзе районында халыҡ судьяһы булып эшләй. Бик күп пьесалары донъя күрҙе. "Хыял иленә сәйәхәт" исемле китабы өсөн Аҡмулла исемендәге премия бирелде.

# Сафуан Якшығолов




- Сафуан Яҡшығолов 1931 Миәкә районы Илсеғол ауылында тыуа. Дәүләкән ауылында мәҙрәсәлә уҡый. Үҙ ауылында мулла була, урыҫ телен уҡыта. “Мөғәллим Солтангилде әфәнденең мәрҫиәһе”, “Башҡорт хәлдәре”, “Дим буйында” тигән шиғри китаптары бар.

# Төхвәт Йәнәби




- Төхвәт Йәнәби 1894 йылдың 14 февралендә Миәкә районы Йәнәби-Урсай ауылында тыуа. Стәрлебаш һәм Ырымбур мәҙрәсәләрендә уҡый. Ҡаҙаҡ ауылдарында балаларҙы уҡытып йөрөй. Граждандар һуғышында ҡатнаша. “Эш сыуағы” тигән шиғри йыйынтығы бар. 1937 йылда репрессияға эләгә һәм атып үлтерелә.

# Ғәли Рафиҡи




- Ғәли Рафиҡи Миәкә районы Баязит ауылында тыуған. “Ғәлиә” һәм “Мөхәммәдиә” мәҙрәсәләрендә уҡый. Журналист, яҙыусы, уҡытыусы, тәжемәсе булып эшләй. Бик күп хикәйәләре һәм очерктары бар: “Ваҡытлы никах”, “Артыҡ кеше”, “Алатау буйҙарында” һ. б.

# Рәсимә Мостафина



- Рәсимә Мостафина 1955 йылдың 4 февралендә Миәкә районының Биҡҡол ауылында тыуа. Мәктәп йылдарында уҡ шиғырҙар яҙа башлай. “Бәллүр күңел”, “Ғүмерем миҙгелдәре” тигән шиғри йыйынтаҡтары бар. Әлеге ваҡытта шәхси эшҡыуар.

Аҡмулланы биргән ер был,
Ғөбәйҙуллин тыуған ер.
Сәсәнлеккә, батырлыҡҡа
Изге төйәк булған ер.
Тыуған яғым – Дим буйҙары,
Тыуған яғым – Миәкә.
Миәкәнең ал таңдары
Мәңге балҡыр йөрәктә